Ҡаралды һәм ҡабул ителде:
Педагогик кәңәшмә ултырышы
Протокол № 1
«31» август 2023 йыл

Килешелде:
Уҡыу-тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары
____ Л. Р. Хисаметдинова
« 31» август 2023 йыл

Раҫланды:
Т.Йосопов исемендәге республика лицей-интернат директоры бойороғо
« 31» август 2023 йыл
№_____

# Башҡорт әҙәбиәте буйынса 7-9-сы кластар өсөн эш программаһы

(төп дөйөм белем биреү кимәленә ярашлы төҙөлдө)

Эш программаһын төҙөүселәр:
Баева Гүзәлиә Рид ҡыҙы,
Нуриева Әлфирә Йәмил ҡыҙы,
юғары категориялы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары

Мәсәғүт
2023

**Аңлатма яҙыу**

Башҡорт әҙәбиәт е буйынса эш программаһы Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән N273-ФЗ “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Федераль законына, Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында”ғы Законына, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Башҡортостан Республикаһы Законына (21.01.99), Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһына, Федераль дәүләт стандарттары положениеһына, төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт әҙәбиәте буйынса өлгө программаларға (төҙ.: М.Б.Юлмөхәмәтов. - Өфө: Китап, 2017) таянып эшләнде.

**Уҡыу планында «Башҡорт әҙәбиәте» предметының урыны**

Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы әҙәбиәтте 202 сәғәт (7-9-сы кластар) күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота. Дыуан районы республика лицей-интернатының уҡыу планына ярашл 7-се класта – 68 сәғәт, 8-се класта – 68 сәғәт, 9-сы класта – 66 сәғәт.

**«Башҡорт әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең төп маҡсаттары** булып түбәндәгеләр тора:

- донъяға гуманистик ҡарашы, милли үҙаңы һәм дөйөм Рәсәй гражданлығы үҙаңы, патриотизм тойғоһона эйә булған, рухи үҫешкән шәхес формалаштырыу;
- шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен реализациялау өсөн кәрәк булған интеллектуаль һәм ижади һәләтлеген үҫтереү;
- уҡыусыларҙың башҡорт, рус һәм донъя әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштарын аңлауы, уларҙы уҡыу һәм анализлау, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерләүгә нигеҙләнеүен, художестволы форма һәм йөкмәтке берлеген, сәнғәттең тормош менән бәйле, тарихи булыуын аңлауы;
- художестволы тексты уҡыу, комментарий биреү, анализлау күнекмәләрен этап менән эҙмә-эҙлекле формалаштырыу;
- художестволы текста йәки башҡа теләһә ниндәй телмәрҙә һалынған мәғәнәләрҙе аңлау алгоритмдарына эйә булыу, үҙеңдең тексыңды төҙөү, уҡылған әҫәр тураһында шәхси баһаңды һәм фекереңде еткерә белеү;
- дөйөм уҡыу күнекмәләренә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә булыу (эшмәкәрлектең маҡсатын билдәләү, уны камиллаштырыу, библиографик эҙләнеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланыу һ.б.).

**Уҡыу-уҡытыу методик комплекттары:**

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Юлмөхәмәтов М.Б., Иҙелбаев М.Х. Өфө: Китап, 2017.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Юлмөхәмәтов М.Б., Иҙелбаев М.Х. Өфө: Китап, 2017.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Иҙелбаев М.Х., Ҡунафин Ғ.С. Өфө: Китап, 2017.

Юлмөхәмәтов М.Б., Ҡунафин Ғ.С. “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенә методик ҡулланма: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-9 кластары өсөн. - Өфө: Китап, 2017.

**«Башҡорт әҙәбиәте» предметын өйрәнеүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре**

Төп урта мәктәпте тамамлап сығыусы уҡыусыларҙың әҙәбиәт фәнен өйрәнеү һөҙөмтәһендә алған:

**шәхси һөҙөмтәләр:**

-шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү;
- танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурс һ.б.);

**метапредмет һөҙөмтәләре (танып белеү, регулятив, коммуникатив):**

-проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;

- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныу сфераһын билдәләү;

- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу,

- үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу маҡсатында Интернетҡа сыға белеү, тексты баҫыу, уны эшкәртә белеү,

-аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;

-сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

әңгәмәсеһенең фекерен тыңларға һәләтле булыу, тикшерелгән предметҡа ҡарата үҙенең нигеҙле ҡарашын әйтә белеү һәм конфликлы хәлдәрҙән сыға белеү;

**предмет һөҙөмтәләре:**

1) танып - белеү сфераһында:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;

- художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡарау;

- әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү, әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау (филологик анализ элементтары);

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;

2) ҡиммәт-ориентация сфераһында:

- башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу;
- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡарашын булдырыу һәм уларҙы баһалау;

-өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпретацияһын булдырыу (айырым осраҡтарҙа);
- автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;

3) коммуникатив сферала:

- төрлө жанрҙарҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;

- проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаталар ҡулланып һөйләй белеү;

- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;

4) эстетик сферала:

-һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәттең образлылыҡ тәбиғәтен аңлау; әҙәби әҫәрҙәрҙе эстетик ҡабул итеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу;

-башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**7 класс**

***И.Кинйәбулатов. Ҙур ышаныс һеҙгә, уҡытыусы! (1с.)*** Уҡытыусы образының бирелеше. Уҡытыусы хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

***Ә.Әминев. Инша. (1с.)*** Уҡытыусы образы. Уҡытыусы хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

***Р.Ғарипов. Тел. (1с.)*** Шиғырҙа туған телдең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәте. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

***Р.Ғамзатов. Туған тел. (1с.)*** Шиғырҙарҙа туған телдең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәте. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

***Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. Риүәйәттәр. (7с.)*** Халыҡ ижады буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (әкиәт, мәҡәл, йомаҡ һ.б.) Фольклор әҫәренең бер төрө булыу яғынан йыр. Оҙон йырҙар һәм ҡыҫҡа йырҙар.Темаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың бер нисә төркөмгә бүленеүе. Тарихи ваҡиғалар, хәрби поход, һуғыш тураһындағы йырҙар. Баструкка йәки һөргөнгә ебәрелгән кешеләр тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр. Түрәләр тураһындағы йырҙар. Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр. Риүәйәт һәм легендалар тураһында төшөнсә. Йыр тураһында төшөнсә.

***Сеңләүҙәр. (1с.)*** Сеңләүҙәрҙең туй йолаһы менән бәйләнгән булыуы, уларҙа элекке башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ауыр яҙмышы, хоҡуҡһыҙ хәле сағылышы. Сеңләүҙәрҙең әһәмиәте.

***“Ерәнсә сәсән менән хан” әкиәте. (1с.)*** Әкиәттең йөкмәткеһе. Ерәнсә сәсән образы.

***Боронғо әҙәбиәтебеҙ үрнәктәре. “Күрәҙәлек китабы”нан. “Ҡорҡот ата китабы”нан. Ә.Йүгнәки “Белем хаҡында һөйләйем…” (2с.)*** Әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙәрҙә әхлаҡ мәсьәләләренең сағылышы. Художество үҙенсәлектәре.

***В.Зефиров “Йәнтүрә” хикәйәһе. (1с.)*** Хикәйәнең В.Зефиров тарафынан яҙып алыныуы. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡатнашыуын күрһәтеү. Йәнтүрә, Аҫылбикә образдары. Уларҙың ҡыйыулыҡ, батырлыҡ сифаттары.

***М.Аҡмулла. Башҡорттарым, уҡыу кәрәк! Дуҫлыҡ. Нәфсе. Аттың ниһен маҡтайһың? Нәсихәттәр. Өлгөр һүҙ. (3с.)*** Аҡмулланың биографияһы. Шиғырҙарҙа сағылдырылған осор, мораль-этик проблемалар.

***М.Ғафури. Үҙем һәм халҡым. Мин ҡайҙа? Гөлдәр баҡсаһында. Һарыҡты кем ашаған? Һунарсы ҡарт.(4с.)*** Яҙыусының биографияһы. Шиғырҙарҙа хеҙмәткә дан йырлау, хеҙмәт кешеләренең генә маҡтауға лайыҡлы булыуын күрһәтеү. Шиғырҙарҙың тәрбиәүи әһәмиәте. Шиғыр төҙөлөшө тураһындағы төшөнсә. Лирик һәм эпик әҫәрҙәр тураһында төшөнсә. Мәҫәл һәм аллегория тураһында төшөнсә.

***Ш.Бабич. Салауат батыр. Зәки – Башҡортостан терәге. Ҡурай Ҡайға. Көтәм. (3с.)*** Ш.Бабичтың биографияһы. “Салауат батыр” шиғырында батырға хас сифаттарҙы данлау, ул ҡалдырған аманатҡа тоғролоҡ идеяһын сағылдырыу. Ҡурай образы аша башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен, данлы тарихын, тәбиғәтен, моң-зарын тасуирлау.

***Д.Юлтый. Тимеркәй фәлсәфәһе. Һандуғасҡа.(3с.)***Яҙыусының биографияһы. Хикәйәнең йөкмәткеһе. Ябай кешенең фажиғәле яҙмышын, эске донъяһын, уй-кисерештәрен сағылдырыу. Тимеркәй образына характеристика. Ҡотлояр образында кешелекһеҙлек һыҙаттарын күрһәтеү. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе.

***Һ.Дәүләтшина. Айбикә. Һырға һабағы. (4с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙәрҙә ауылдарҙы социалистик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороу өсөн алып барылған көрәш, был көрәштә актив ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙ образын һүрәтләү. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәр

теленең байлығы. Әҙәби әҫәрҙә образ, персонаждарҙың характерын асыу саралары тураһында төшөнсә. Портрет тураһында төшөнсә. Повесть тураһында төшөнсә. әҙәби әҫәр геройҙарына характеристика биреү.

***Р.Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары. Мәскәүгә минең бүләгем. (3с.)*** Шағирҙың биографияһы. Поэмала Ағиҙел образында башҡорт халҡының данлы тарихи үткәндәрен, ауыр яҙмышын, үҙ азатлығы өсөн быуаттар буйы көрәшеүе һәм бәхетле тормошҡа сығыуына ышанысын тасуирлау. Поэманың художество үҙенсәлектәре. Халыҡ ижады традициялары. Лиро-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре.Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Тыуған ергә һөйөүҙең сағылышы.

***М.Кәрим. Айгөл иле. Ап-аҡ мөғжизә. Шағир шатлығы. (5с.)*** Яҙыусының биографияһы. Драманың йөкмәткеһе, темаһы, идеяһы. Образдарҙа халыҡҡа хас гүзәл сифаттарҙың сағылышы. Драманың художестволы үҙенсәлектәре. Драма тураһында төшөнсә. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Шағир образы.

***М.Шолохов. Кеше яҙмышы. (1с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Ватан яҙмышы һәм кеше яҙмышы. Андрей Соколов образы. Хикәйәнең композицияһы. Кешенең азатлыҡҡа ынтылыуы, батырлығы. Хикәйәлә автор һәм уның һөйләүе.

***Ғ.Хөсәйенов. Һуңғы тарпан (1с.).*** Хикәйәттең төп проблемаһы. Ҡырағай аттар – тарпандарҙың ҡырылып бөтөүен күрһәтеү. Кейек-хайуандарға, аттарға рәхимле булырға, уларҙы һаҡларға өндәү.

***Я.Хамматов. Ғәйзулла.(2с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙә алтын йыуыусылар тормошо. Образдарҙа халыҡ яҙмышының кәүҙәләндерелеүе.

***Р.Өмөтбаев. Атлы башҡорт.(3с.)*** Әҫәрҙә Ватан һуғышы осорондағы һуғыш ваҡиғаларын, батыр яугирҙар һәм ат образын тасуирлау.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.***

М.Ғафури. «Тормош баҫҡыстары», «Ант».
С.Агиш. «Әхмәҙулла».
К.Мәргән. «Ҡариҙел».
Ғ.Хөсәйенов. «Батырҙар ҡиссаһы».
З.Биишева. «Салауаттың һуңғы монологы».
И.Ғиззәтуллин. «Яңынан сафта», «Үлгәндән һуң утыҙ йыл».
А.Игебаев. Шиғырҙар. Поэмалар.
Ә.Вахитов. «Шәжәрә».
Д.Бүләков. «Ауылымдың аҡ өйҙәре», «Килмешәк».
Ш.Анаҡ. «Моңдар иле».
С.Злобин. «Салауат Юлаев».
Я.Хамматов. «Төньяҡ амурҙары».
Н.Мусин. «Кеше һуҡмағы».

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***

Башҡорт халыҡ йырҙары.
С.Юлаев. «Тыуған илем», «Уралым».
М.Ғафури. «Мин ҡайҙа?», «Үҙем һәм халҡым», «Гөлдәр баҡсаһында».
Аҡмулла.”башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”, «Аттың ниһен маҡтайһың?».
Һ. Дәүләтшина. «Айбикә» хикәйәһенән өҙөк.
М.Кәрим. «Айгөл иле» драмаһынан өҙөк.
Р.Ниғмәти. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһынан өҙөк.
Р.Өмөтбаев. «Атлы башҡорт» әҫәренән өҙөк.

**8 класс**

***Р.Назаров. “Башҡорт”, А.Игебаев. “Башҡортостан”, Х.Ғиләжев. “Башҡорт теле”, Х.Назар. “Башҡорт теле”, М.Ямалетдинов. “Халҡым хазинаһы”, М. Хөсәйен. “ Башҡорт теле ғорур яңғырай”.(5 с.)***

***В.Распутин. “Француз теле дәрестәре”. (3 с.).*** Рус әҙәбиәтенең күренекле вәкиле – В.Г.Распутиндың биографияһы һәм ижады. Кеше күңелен байытыусы рухи ҡиммәттәрҙең сағылышы.

***Дини әҙәбиәт. Тәрбиәле булайыҡ. Р.Бикбаев. “Хәҙистәр”, М.Ямалетдинов. “Әл – Фатиха сүрәһе”, “Әл – Ихлас сүрәһе”, “ Әл-Кәүсәр сүрәһе” (1 с.).*** Халыҡты йәмғиәтте яңыртыуға, демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙағы көрәштә берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы. Башҡорт халҡына хас сифаттарҙың сағылышы. Хәҙистәр тураһында.

***Шафиҡ Әминев-Тамъяни. “Урал”, “Башҡорт бабаларының тарихы”(1 с.).***

Биографик белешмә. Авторҙың Тыуған илде һаҡлаған ир-егеттәрҙе данлауы, ер һыуҙы, Уралдың матур тәбиғәтен тасуирлауы.

***Ғ.Ибраһимов. “Кинйә” (4 с.).*** Романда сағылдырылған осор, социаль-тарихи шарттар, халыҡ тормошо һәм көрәшенең сағылышы. Халыҡ образының бирелеше.

***Әйтештәр. “Бер тигәс тә ни яман”, “Аҡмырҙа сәсән һәм Ҡобағош сәсәндең әйтеше” (1 с.).*** “Аҡмырҙа сәсән һәм Ҡобағош сәсәндең әйтеше”ндә башҡорт феодаль йәмғиәтендәге синыфтарҙа бүленеш һәм синфи көрәштең сағылышы. “Бер тигәс тә ни яман?” әйтешендә йәш быуынды тәрбиәләү, халыҡтың фантазияһы, тапҡыр аҡылы һәм тормошо тураһындағы философияның сағылышы.

***Ҡобайырҙар. “Ил тигәндең кеме юҡ”, “Салауат батыр” (2с.)*** Башҡорт халыҡ ижадының эпик жанры булараҡ - ҡобайыр. “Салауат батыр” ҡобайырында тыуған ерҙе һәм уның азатлығы өсөн көрәшкән батырҙарҙы данлау. “Ил тигәндең кеме юҡ” ҡобайырында йәш быуынды тәрбиәләү, халыҡтың фантазияһы, тапҡыр аҡылы һәм тормошо тураһындағы философияның сағылышы. Ҡобайырҙарҙың художество үҙенсәлектәре.

***Әҙәбиәт теорияһы****. Ҡобайыр, әйтеш тураһында белешмә.*

***Мостай Кәрим. “Сәсән” (1 с.)*** Шағир ижадында сәсән образы. Унын йәмғиәттәге роле.

***Яныбай Хамматов. “Төньяҡ амурҙары” (4 с.)*** Яҙыусының биографияһы. Башҡорт халҡының XIX быуат башындағы тормошон һүрәтләү. Башҡорт халҡының 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән батырлыҡтарын сағылдырыу.

***Ғайса Хөсәйенов. “Ете ырыу ” (2 с.).*** Яҙыуының биографияһы. Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙә тарихҡа аңлатма биреү, халыҡтың тормош-көнкүрешен, социаль һәм милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшен һүрәтләү. Аҡһаҡалдар, ил батырҙары образын һүрәтләү.

***Булат Рафиҡов. “Эйәрләнгән ат” (3 с.).*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙә сағылдырылған осор. Тарихи фараздың жанр үҙенсәлектәре. Геройҙарҙың фажиғәле яҙмыштарын һәм һәләкәтен тасуирлау. Образдарға характеристика.

***Рәшит Солтангәрәев. “Осто бөркөт”. Кем ул Муса Мортазин?(2 с.).*** Повестың идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙә башҡорт ғәскәрҙәренең ҡыйыулығын һүрәтләү Муса Мортазин шәхесе.

***Ғ.Сәләм. “Республика иртәһе”, “Шоңҡар”(3 с.).*** Ғ.Сәләмдең биографияһы. “Республика иртәһе” шиғырында авторҙың республика иртәһен һүрәтләүе. “Шоңкар” поэмаһының темаһы, идея йөкмәткеһе. Әҫәрҙә кешенең яңынан тыуыу темаһы. “Шоңкар” поэмаһында төп образдар. Композиция үҙенсәлектәре, теленең образлылығы, байлығы. ***Әҙәбиәт теорияһы****.* Поэтик синтаксис тураһында төшөнсә.

***Б.Бикбай. “Ер”, “Ҡаһым түрә”(3 с.).*** Яҙыусының биографияһы. “Ер” поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙә күтәрелгән ер, азатлыҡ, көрәш темалары. Ер образы. Лирик герой образы. Поэманың художество үҙенсәлеге.

***З.Биишева. “Йәшәү – хеҙмәт”, “Һөнәрсе менән Өйрәнсек” (3 с.).*** З.Биишеваның тормош юлы һәм ижады. “Йәшәү-хеҙмәт” шиғырының хәҙерге тормошта актуаллелеге.

“Һөнәрсе менән Өйрәнсек” әҫәренең идея- тематик йөкмәткеһе. Һөнәрсе һәм Өйрәнсек образдары, художестволы эшләнеше. Хикәйәт төшөнсәһе.

***М.Кәрим. “Үлмәҫбай” поэмаһы, “Ҡайын япрағы тураһында”, “Россиянмын”, “Йәшәйһе бар” , “Айһылыуҙың күҙ йәштәре”, “Ҡоролтайға ҡотлау” шиғырҙары (5 с.)*** Яҙыусының биографияһы. Поэманың идея-тематик йөкмәткеһе. Үлмәҫбай һәм Теребай совет һалдаттарының дөйөмләштерелгән образы. Әҫәрҙең художество үҙенсәлектәре. Хеҙмәт, кеше ғүмере, йәшәү мәғәнәһе кеүек проблемаларҙы асыу.

***Р.Ғарипов. “Урал йөрәге” , “Аманат”, “Уйҙарым” (3 с.).*** Биографик белешмә. “Урал йөрәге” шиғырында Башҡортостан образының образлы сағылышы. Башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәше. Шиғырҙа халыҡтар дуҫлығы темаһы.

***Р.Бикбай. “Башҡортостан бында башлана”, “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”, “Дауыл”, “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта” (3 с.).*** Тыуған ергә мөхәббәт темаһы. Унының именлеген, тәбиғәтен һаҡлауға өндәү.

***Р.Паль. “Уралым”. (1с.).*** Биографик белешмә. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Урал образы.

***Т.Ғиниәтуллин. “Мәтрүшкә еҫе” , “Әсә һәм бала” әҫәрҙәре (4 с.).*** “Әсә һәм бала” хикәйәһендә әсә һәм бала образдары, уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәренең сағылышы.

***Н.Нәжми. “Башҡортостан”, “Аҡ шишмә”, “Һинең нindәй улыңмын мин?” (1 с.).*** Әҫәрҙәрҙә Башҡортостан, Тыуған ергә оло һөйөүҙең тасуирланыуы. Шиғырҙарҙа лирик герой образы.

***Ә.Әминев.”Ҡытай-город” (2 с.).*** Идея-тематик йөкмәткеһе.Төп образдары.

***Х.Назар. “Ғәзиз ерем”, “Аҡҡа табыныу”, “Дауа” (1 с.).*** Шиғырҙарҙа Башҡортостандың поэтик образы, унының ҙурлығын, матурлығын, байлығын, тәбиғәтенең гүзәллеген, халҡының изге күңеллеген, ҡунаҡсыл булыуын данлау мотивтары. Поэмала туған тел һәм экологик проблемаларҙың сағылышы.

***Р.Камал.”Таня-Таңһылыу” (2 с.).*** Идея-тематик йөкмәткеһе, проблемалары. Таня-Таңһылыу, Петрик образдары.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр:***

С.Юлаев шиғырҙары.Салауат Юлаев хаҡында башҡорт халыҡ йырҙары һәм художестволы әҫәрҙәрҙән өҙөктәр.
Р.Ниғмәти.”Ағиҙел ярында”
С.Кулибай.”Күңелле хикәйәләр”,”Яҙһылыу”.
Б.Бикбай.”Тере шишмәләр”
М.Кәрим “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”
З.Биишева””Уйҙар,уйҙар...”, ”Мөхәббәт һәм нәфрәт”
Ж.Кейекбаев.”Туғандар һәм таныштар”.
Я.Хамматов.”Башҡорттар китте һуғышҡа”
Ә.Атнабаев.”Тыуған тупраҡ”,”Мөхәббәт юлы”
Р.Сафин.”Яҙҙар көтәм”.
Ф.Рәхимғолова .”Тамсылар йырлай”
Ә.Хәкимов .”Ҡош юлы”.
С.Айытматов.”Беренсе уҡытыусы”.
Ә.-З.Вәлиди. “Хәтирәләр”.
Ғ. Ибраһимов. “Кинйә”.
Н.Мусин. “Мәңгелек урман”.
Н.Нәжми. “Атай йорто”, “Тарафтар”.
Р.Ғарипов. “Минең антологиям”, “Алырымҡош менән Бирмәмҡош”.
Ғ.Дәүләди. “Мөхәббәт ғазабы”.
Й.Солтанов. “Ҡырҡбыуын”.
М.Ғәли. “Аҡ ямғыр”, “Ҡояшлы шишмә”.
Ҡ.Аралбай. Поэмалар.

Р.Бикбай. “Яҙмышым”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”.
Х.Назар. “Асманға ашыу”.
М.Иҙелбаев. “Декабрь йондоҙҙары”.
Ф.туғыҙбаева. “Фатихамды бирәм һиңә”.
Б.Ноғоманов. “Дәүер шаңдауҙары”.

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***
“Бер тигәс тә ни яман...”, “Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне”.
Б.Бикбай “Ер” поэмаһынан өҙөк.
Ғ.Сәләм “Шоңҡар” поэмаһынан өҙөк.
М.Кәрим “Йәшәйһе бар”
Р.Назаров “Башҡорт”.
З.Биишева “Һөнәрсе менән Өйрәнсек” әҫәренән өҙөк.
Р.Ғарипов “Урал йөрәге”, ”Аманат”, ”Уйҙарым”.
Р.Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”.

**9 класс**

***Инеш.(1с.)*** Мәҙәниәт системаһында әҙәбиәт. Сәнғәт һәм әҙәбиәт бәйләнеше. Художестволы әҙәбиәт һәм фән. Художестволы әҙәбиәт – һүҙ сәнғәте. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. Уның идея-эстетик йүнәлеше.

***Халыҡ ижады. (1с.)*** Башҡорт халыҡ ижады буйынса алған белемдәрҙе ҡабатлау. Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәт. Фольклорҙа халыҡ педагогикаһының сағылышы.

***Башҡорт халыҡ ижады. Уның традицион жанрҙары.(2с.)*** Ҡарыһүҙҙәр. Йола поэзияһы. Халыҡ ижадының сәсмә формалары. Халыҡтың афористик жанры. Хәҙерге башҡорт фольклоры һәм уның үҫеш тенденциялары.

***Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар. “Урал батыр” эпосы. “Иҙеүкәй менән Мораҙым” эпосы. (11с.)*** Халыҡ ижады эпик әҫәрҙәренең боронғо жанрҙары булыу яғынан ҡобайырҙар. Уларҙың жанр үҙенсәлектәре. Жанр формалары һәм төркөмдәре. Эпостарҙа күтәрелгән философик, педагогик һәм әхлаҡ-этик проблемалар. Образдарға характеристика.Ҡобайырҙарҙың художество үҙенсәлектәре.

**Ауыҙ-тел әҙәбиәте.** ***(9с.)*** Боронғо төркиҙәр һәм уртаҡ төрки әҙәбиәтенән үрнәктәр.М.Ҡашғари. Й.Баласағуни “Ҡутатғу билиг”, “Ҡорҡот ата”, “Уғыҙнамә” хикәйәте.Башҡортостанда боронғо ҡульяҙма әҙәбиәт. Ҡол Ғәли “Ҡисса и Йософ” поэмаһы.Ҡотб “Хөсрәү вә Ширин”, Хәрәзми “Мөхәббәтнамә”, Сәйф Сараи “Гөлөстан бит төрки”, “Буҙегет”, “Батыршаның батшаға яҙған хаты”.Шәжәрәләр.Юрматы ырыуы шәжәрәһе. Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе.Башҡортостандың Рәсәйгә ҡушылыу сәбәптәре. Шәжәрә тураһында төшөнсә. Шәжәрәләрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Салауат Юлаевтың тормошо һәм яҙмышы. Салауат – яугир, шағир, сәсән. Шиғырҙарының тематикаһы һәм проблематикаһы. Тыуған ил, тәбиғәт, мөхәббәт, азатлыҡ һәм батырлыҡ тураһындағы шиғырҙары. Тарихи шәхес, әҙәби герой, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр тураһында төшөнсә.

***Башҡортостанда боронғо һәм урта быуаттарҙағы ҡульяҙма әҙәбиәт. Дастансылыҡ традициялары.(2 с.)***

***XVI-XVIII быуаттар ҡульяҙма шиғриәте. XVI-XVIII быуаттар прозаһы. (2с.)*** Т.Ялсығол-әл Башҡорди. Әҙәбиәттәге ике йүнәлеш. Шағирҙың тормош юлы. Эшмәкәрлеге. Ижады.

***XIX быуатта Башҡортостанда яҙма һәм баҫма әҙәбиәт.(4с.)*** “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу” ҡиссаһы. “Зөһрә менән Алдар” ҡиссаһы. “Буҙйегет” дастаны.

***XIX быуаттың икенсе яртыһында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт. (1с.)*** **.**Ижтимағи тормош һәм мәҙәниәт. Суфый шағирҙар.Уларҙың ижадында дини һәм донъяуи

мотивтар.Мәғрифәтселек хәрәкәте. Башҡорт фольклорын йыйыуҙа рус әҙиптәре һәм ғалимдары.

***М. Аҡмулла.(7с.)*** Тормошо һәм ижад юлы.Халыҡты мәғрифәткә өндәү, феодаль иҫкелеккә, дини фанатизмға ҡаршы көрәш. Аҡмулла поэзияһының төп идея йөкмәткеһе. Аҡмулла образының әҙәбиәттә һәм сәнғәттә сағылышы.

***М. Өмөтбаев. (4с.)*** М.Өмөтбаевтың ғилми-ағартыу, тарих, этнография, фольклор, тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге. Өмәтбаев – мәғрифәтсе һәм шағир.Шиғырҙарының тематикаһы. Поэтик эшләнеше. Лирик шиғырҙары, мәҫәле.М.Өмөтбаев ижады тураһында ғалимдар һәм яҙыусылар.

***Р. Фәхретдин. (4с.)*** Биографик белешмә. Философик лирика. Тәбиғәт лирикаһы. Шиғыр-ҡобайырҙар. Балалар һәм ололар өсөн яҙған нәсихәт китаптары. Мәғрифәтселек ҡараштары. “Сәлимә” повесы. Сәлимә образына характеристика. Әҙәби әҫәрҙәренең, ғилми хеҙмәттәренең башҡорт мәҙәниәте һәм фәне өлкәһендәге урыны, әһәмиәте. “Аҫар” китаптар серияһы. Р.Фәхретдин – тарихсы. Уның хеҙмәтендә башҡорт халҡы тарихының сағылышы.

***ХХ быуат башында ижтимағи тормош, мәҙәниәт һәм әҙәбиәт.(1с.)*** Башҡортостанда ижтимағи-сәйәси хәл. Әҙәби хәрәкәт. Милли матбуғаттың тыуыуы. Поэзия, проза жанрҙарының үҫеүе. Драматургияның күтәрелеше. Мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға күсеү. Романтизм күренештәре.

***С.Яҡшығолов.(2с.)*** Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. “Башҡорт хәлдәре”, “Дим буйы” йыйынтыҡтары. Башҡорттарҙың хәле, ер мәсьәләләре, мәғрифәт эше тураһында уйланыуҙары. Поэзияһындағы төрлө жанрҙар.

***З.Һаҙи.(1с.)*** Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә.

***Ф. Сөләймәнов.(4с.)*** Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Шиғырҙарындағы милли тойғолар. “Башҡорт моңо” шиғыры. Туған халҡының ауыр яҙмышы тураһындағы уйланыуҙары. Башҡорттарҙың тарихы һәм ХХ быуат башындағы тормошо тураһындағы хикәйәләре. “Тимербай ҡурайсы” хикәйәһе. “Салауат батыр” пьесаһы. Салауат образын сәхнәгә сығарған тәүге пьеса булараҡ әһәмиәте.

***М. Ғафури.(6с.)*** Яҙыусының тормош юлы һәм ижадына белешмә. Әҫәрҙәрендә социаль тигеҙһеҙлекте, ғәҙелһеҙлекте фашлау. “Шағирҙың алтын приискыһында” повесы. Повестың композицион үҙенсәлектәре, сюжеты. Әҫәрҙең композицияһы һәм сюжеты. Художество методы, художестволы образ тураһында төшөнсә.

***Ш.Бабич.(5с.)*** Шағирҙың тормош һәм ижад юлы тураһында белешмә. Башҡортостан, азатлыҡ өсөн көрәш, тәбиғәт, мөхәббәт темаһы. Бабич – шиғыр оҫтаһы. Поэзияһының төп үҙенсәлектәре. Ш.Бабичтың башҡорт әҙәбиәте тарихында тотҡан урыны. Шиғыр төҙөлөшө тураһында. Шиғырҙа ритм һәм рифма.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.***

Башҡорт халыҡ ижады. Эпос.
С.Юлаев. Шиғырҙар. Йырҙар. Рәсми ҡағыҙҙар.
М.Иҙелбаев. Юлай улы Салауат.
Башҡорт шиғриәте антологияһы.
Башҡорт әҙәбиәте 20 быуат башында.
Ф.Сөләймәнов. Башҡорт йәйләүендә.
М.Буранғолов. Һайланма әҫәрҙәр.
Л.Толстой башҡорттар араһында.
М.Аҡмулла. Шиғырҙар.
М.Өмөтбаев. Йәдкәр.
Ш.Бабич. Беҙ үҙебеҙ - башҡорттар.
Ғ.Хөсәйенов. Беҙ үҙебеҙ – башҡорттар.
Ә.Вилданов. Аҡмулла - яҡтылыҡ йырсыһы.

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр:***

«Урал батыр» эпосынан өҙөк (Аҡбуҙатты тасуирлаған урын).
С.Юлаев «Яу», «Уҡ», «Егеткә».

М.Аҡмулла «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк», «Инсафлыҡ», “Тиһеңме?”.
Ш.Бабич «Халҡым өсөн», «Кем өсөн?», «Салауат батыр».

**VII класс өсөн тематик план(Аҙнаһына ике дәрес,68 сәғәт)**

| № | Дәрестең темаһы |
|---|---|
| 1 | И. Кинйәбулатов. Ҙур ышаныс һеҙгә, уҡытыусым! |
| 2 | Ә. Әминев. «Инша» хикәйәһе |
| 3 | Р. Ғарипов. «Тел» шиғыры<br>Р. Ғамзатов. «Туған тел» шиғыры |
| 4 | Башҡорт халыҡ ижады тураһында |
| 5 | «Урал», «Азамат», «Эскадрон» йырҙары |
| 6 | «Ҡаһым түрә», «Ҡолой кантон», «Любизар» йырҙары |
| 7 | «Зөлхизә», «Ғилмияза» йырҙары. |
| 8 | Легендалар һәм риүәйәттәр тураһында. |
| 9 | «Ҡуңыр буға» риүәйәте |
| 10 | «Ҡуңыр буға» риүәйәте |
| 11 | «Буранбай» риүәйәте, йыры |
| 12 | Йырҙар тураһында. |
| 13 | Сеңләүҙәр. Сеңләүҙәр тураһында. |
| 14 | «Ерәнсә сәсән менән хан » әкиәте. |
| 15 | Кл. тыш. «Ерәнсә сәсән » әкиәте. |
| 16 | Боронғо әҙәбиәт үрнәктәре |
| 17 | «Ҡорҡот Ата» китабы |
| 18 | Үтелгәнде ҡабатлау. |
| 19 | В. Зефиров «Йәнтүрә» хикәйәһе. |
| 20 | Аҡмулла. Аҡмулла шиғырҙары.<br>«Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» |
| 21 | «Дуҫлыҡ», «Нәфсе»,«Аттың ниһен маҡтайһың?», «Өлгәр һүҙ» шиғырҙары |
| 22 | М.Ғафури. Бала сағы һәм уҡыу йылдары. М. Ғафури Өфөлә. |
| 23 | «Үҙем һәм халҡым», «Мин ҡайҙа «Гөлдәр баҡсаһында» |
| 24 | Т. ү. Шиғыр төҙөлөшө тураһында. |
| 25 | М.Ғафури. «Һарыҡты кем ашаған?», |
| 26 | Мамин-Сибиряк. «Һунарсы ҡарт» |
| 27 | Шәйехзада Бабич «Салауат батыр»,<br>«Зәки –Башкортостан терәге». |
| 28 | «Ҡурайҡайға». Ш.Бабич шиғырҙары тураһында |
| 29 | Т.Ү. «Бабич» фильмы |
| 30 | Д. Юлтый «Тимеркәй фәлсәфәһе»<br>хикәйәһе |
| 31 | Д. Юлтый «Тимеркәй фәлсәфәһе».<br>Хикәйә тураһында |
| 32 | Һ.Дәүләтшина «Айбикә».<br>«Айбикә» повесы тураһында. |
| 33 | Һ.Дәүләтшина «Айбикә». |
| 34 | Һ.Дәүләтшина «Айбикә». |
| 35 | Һ.Дәүләтшина «Айбикә». |
| 36 | Һ.Дәүләтшина «Һырға һабағы». |
| 37 | Һ.Дәүләтшина «Һырға һабағы». |
| 38 | Һ.Дәүләтшина «Һырға һабағы». |
| 39 | Һ.Дәүләтшина «Һырға һабағы». |
| 40 | Т.ү. Һ.Дәүләтшина ижады буйынса инша |
| 41 | Р. Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары». |
| 42 | Р. Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары». |

| | |
|---|---|
| 43 | Р. Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары». |
| 44 | Р. Ниғмәти «Мәскәүгә минең бүләгем». |
| 45 | Мостай Кәрим ижады |
| 46 | Мостай Кәрим «Айгөл иле» драмаһы |
| 47 | Мостай Кәрим «Айгөл иле» драмаһы |
| 48 | Мостай Кәрим «Айгөл иле» драмаһы |
| 49 | Мостай Кәрим «Айгөл иле» драмаһы |
| 50 | Мостай Кәрим «Айгөл иле»<br>Айгөл иле» драмаһы тураһында |
| 51 | Мостай Кәрим «Ап-аҡ мөғжизә» әҫәре |
| 52 | Мостай Кәрим «Ап-аҡ мөғжизә» әҫәре |
| 53 | Т.ү Мостай Кәрим ижадын йомғаҡлау |
| 54 | М. Шолохов. «Кеше яҙмышы» әҫәре |
| 55 | М. Шолохов. «Кеше яҙмышы» әҫәре |
| 56 | М. Шолохов. «Кеше яҙмышы» әҫәре |
| 57 | Ғ. Хөсәйенов ижады. «Һуңғы тарпан» хикәйәте |
| 58 | Ғ. Хөсәйенов. «Һуңғы тарпан» хикәйәте |
| 59 | Я. Хамматов. «Ғайзулла» әҫәре |
| 60 | Я. Хамматов. «Ғайзулла» әҫәре |
| 61 | Я. Хамматов. «Ғайзулла» әҫәре |
| 62 | Кл.т. Төйәгемдең арҙаҡлы шәхестәре |
| 63 | Кл.т. Яратҡан геройым |
| 64 | Р. Өмөтбаев «Атлы башҡорт» |
| 65 | Р. Өмөтбаев «Атлы башҡорт» |
| 66 | Р. Өмөтбаев «Атлы башҡорт» |
| 67 | Р. Өмөтбаев «Атлы башҡорт» |
| 68 | Йыл буйына үтелгәндәрҙе йомғаҡлау |

**VIII класс өсөн тематик план(Аҙнаһына ике дәрес, 68 сәғәт)**

| | |
|---|---|
| 1 | Р.Назаров «Башҡорт» шиғыры<br>А. Игебаев «Башҡортостан» шиғыры |
| 2 | Х. Ғиляжев. «Башҡорт теле», М. Хөсәйен. «Башҡорт теле ғорур яңғырай» |
| 3 | В. Распутин. «Француз теле дәрестәре» |
| 4 | В. Распутин. «Француз теле дәрестәре» |
| 5 | В. Распутин. «Француз теле дәрестәре» |
| 6 | Дини әҙәбиәт |
| 7 | Р. Бикбаев.Хәҙистәр |
| 8 | Ш.Ә.Тамъяни «Урал», «Башҡорт бабаларының тарихы» |
| 9 | Ғ.Ибраһимов «Кинйә» романы. |
| 10 | Романда сағылдырылған осор |
| 11 | Романда халыҡ тормошо. Йомғаҡлау |
| 12 | Әйтештәр. |
| 13 | Ҡобайырҙар |
| 14 | Ҡобайырҙар |
| 15 | Я. Хамматов. «Төньяҡ амурҙары» романы |
| 16 | Я. Хамматов. «Төньяҡ амурҙары» романы |
| 17 | Я. Хамматов. «Төньяҡ амурҙары» романы |
| 18 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |
| 19 | Ғ. Хөсәйенов. «Ете ырыу» хикәйәһе |
| 20 | Ғ. Хөсәйенов. «Ете ырыу» хикәйәһе |
| 21 | Кластан тыш.«Башҡорткөсө» әҫәре |
| 22 | Б. Рафиҡов. «Эйәрләнгән ат» әҫәре |
| 23 | Б. Рафиҡов. «Эйәрләнгән ат» әҫәре |

| | |
|---|---|
| 24 | М Б. Рафиҡов. «Эйәрләнгән ат» әҫәре. |
| 25 | Т. Ү. Салауат Юлаев тураһында |
| 26 | Р. Солтангәрәев «Осто бөркөт» повесы |
| 27 | Р. Солтангәрәев «Осто бөркөт» повесы |
| 28 | Т.Ү. Муса Мортазин тураһында |
| 29 | Ғ.Сәләм тормошо, ижады |
| 30 | Сәләм «Шоңҡар» поэмаһы |
| 31 | Сәләм «Шоңҡар» поэмаһы |
| 32 | Кл. тыш. Тыуған яғым шәхестәре |
| 33 | Б.Бикбай «Ер»поэмаһы |
| 34 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |
| 35 | « Ҡаһым түрә». Идея-тематик йөкмәткеһе |
| 36 | « Ҡаһым түрә». Идея-тематик йөкмәткеһе |
| 37 | « Ҡаһым түрә». Идея-тематик йөкмәткеһе |
| 38 | Кл. тыш. Б. Бикбай ижады тураһында |
| 39 | З.Биишева тормошо, ижады |
| 40 | «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәре |
| 41 | «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» әҫәре |
| 42 | Кл. тыш. «Мөхәббәт һәм нәфрәт»әҫәре |
| 43 | М. Кәрим тормошо, ижады |
| 44 | М. Кәрим шиғырҙары |
| 45 | « Үлмәҫбай» поэмаһы |
| 46 | « Үлмәҫбай» поэмаһы |
| 47 | Т.ү. Поэманы йомғаҡлау |
| 48 | Кл. тыш. М. Кәрим әҫәрҙәре |
| 49 | Р.Ғарипов. «Урал йөрәге». |
| 50 | Р.Ғарипов. «Аманат». |
| 51 | Р. Ғарипов. «Уйҙарым» |
| 52 | Кл. тыш «Көндәлектәре» |
| 53 | Р. Бикбаев. «Башҡортостан бында башлана» шиғыры |
| 54 | « Йүкәләрҙән һығылып бал тама» шиғыры |
| 55 | Т.ү. Р. Бикбаев ижадында Башҡортостан образы |
| 56 | Р. Паль. «Уралым» шиғыры |
| 57 | Т. Ғиниәтуллин. «Мәтрүшкә еҫе» әҫәре |
| 58 | Т.Ғиниәтуллин. «Мәтрүшкә еҫе» әҫәре |
| 59 | Т.Ғиниәтуллин.« Әсә һәм бала» әҫәре |
| 60 | Т.Ғиниәтуллин.« Әсә һәм бала» әҫәре |
| 61 | Т.ү. Әсәйҙәргә рәхмәт әйтәйек. Инша. |
| 62 | Н.Нәжми ижады |
| 63 | Ә.Әминев.«Ҡытай- город» әҫәре |
| 64 | Ә.Әминев.«Ҡытай- город» әҫәре |
| 65 | Ә.Әминев.«Ҡытай- город» әҫәре |
| 66 | Х.Назар.«Аҡҡа табыныу», « Дауа» шиғырҙары |
| 67 | Р.Камал.«Таня- Таңһылыу» әҫәре |
| 68 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау, йомғаҡлау |

**IX класс өсөн тематик план (Аҙнаһына ике дәрес, 66 сәғәт)**

| № | Дәрестең тематик планы |
|---|---|
| 1 | Художестволы әҙәбиәт |
| 2 | Халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәт |
| 3 | БХИ, унын жанрҙары |
| 4 | Халыҡ ижадының сәсмә формалары |
| 5 | Халыҡ ижадының сәсмә формалары |
| 6 | Халыҡ ижадының афористик формалары |

| | |
|---|---|
| 7 | Эпостар һәм ҡобайырҙар |
| 8 | «Урал батыр» эпосы |
| 9 | «Урал батыр» эпосы |
| 10 | «Урал батыр» эпосы |
| 11 | «Урал батыр» эпосы |
| 12 | Т.ү. «Урал батыр» эпосы буйынса инша |
| 13 | «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы |
| 14 | Боронғо һәм Урта быуаттар әҙәбиәте |
| 15 | Башҡортостанда боронғо ҡулъяҙма әҙәбиәт |
| 16 | Ҡол Ғәли «Ҡиссаи Йософ» |
| 17 | Ҡол Ғәли «Ҡиссаи Йософ» |
| 18 | Ҡотб. «Хөсрәү вә Ширин» дастаны |
| 19 | Хәрәзми «Мөхәббәтнамә». Сәйф Сараи. «Гөлөстан бит –төрки» |
| 20 | «Буҙъегет» әҫәре |
| 21 | «Бәхтиәрнамә» әҫәрҙәре |
| 22 | «Бәхтиәрнамә»,«Сәйәхәтнамә» әҫәрҙәре |
| 23 | Шәжәрә, тәүарих |
| 24 | Т.ү. Шәжәрә төҙөү |
| 25 | Йыраүҙар ижады |
| 26 | Сәсәндәр ижады |
| 27 | Сәсәндәр ижады |
| 28 | Салауат Юлаев тормошо һәм яу юлы |
| 29 | Салауат Юлаев шағир һәм сәсән |
| 30 | Салауат Юлаев ижады |
| 31 | Кл.тыш уҡыу д.С.Юлаев тур- да әҫәрҙәр |
| 32 | Т.ү. Быуаттар аша яңғырай исеме. Инша |
| 33 | Тарихи шәхес һәм әҙәби герой. |
| 34 | Үтелгәнде ҡабатлау. |
| 35 | XVIII быуат әҙәбиәтендәге йүнәлештәре |
| 36 | Батыршаның батшаға яҙған хаты |
| 37 | Тажетдин Әл- Башҡорди |
| 38 | Ғәбдерәхим Усман |
| 39 | XIX быуат әҙәбиәте |
| 40 | Һ. Сәлихов, Ғ. Соҡорой ижады |
| 41 | Традицион жанрҙар системаһы |
| 42 | М. Аҡмулла тормошо һәм ижады. |
| 43 | М. Аҡмулланың мәғрифәтселек идеялары |
| 44 | Т.Ү. «Аҡмулланың әҙәбиәт тарихында роле» |
| 45 | М.Өмөтбаев тормошо. «Ҡайыш илә йүкә», |
| 46 | «Йомран иле» шиғырҙары |
| 47 | М.Өмөтбаев «Бөйөк шағир А.С.Пушкин», «Башҡорттар» әҫәрҙәре |
| 48 | Р.Фәхретдинов – тарихсы, «Аҫар» китаптар серияһы |
| 49 | Р.Фәхретдинов «Әсмә» әҫәре |
| 50 | Кл.тыш уҡыу дәресе «Нәсихәттәр» әҫәре |
| 51 | Т.Ү. Инша «Нәсихәттәр әҫәрендә тәрбиә» |
| 52 | XX быуат башы әҙәбиәте |
| 53 | С. Яҡшығолов тормошо, ижады |
| 54 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |
| 55 | Ф.Сөләймәнов. Тормошо, ижады. |
| 56 | Ф.Сөләймәнов. «Башҡорт моңо» әҫәре |
| 57 | Ф.Сөләймәнов «Салауат батыр» драмаһы |
| 58 | Революцион поэзия үрнәктәре |
| 59 | М.Ғафури тормошо, ижады «Себер тимер юлы йәки милләттең хәле» әҫәре |
| 60 | М.Ғафури ижады, шиғырҙары |

| | |
|---|---|
| 61 | «Шағирҙың алтын приискыһында» әҫәре |
| 62 | «Шағирҙың алтын приискыһында» әҫәре |
| 63 | М.Ғафури ижадын йомғаҡлау. |
| 64 | Ш.Бабич. Тормош юлы.Ижады |
| 65 | Ш.Бабич. «Халҡым өсөн», «Кем өсөн», « Бер минут», «Бай һәм ярлы», «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде» шиғырҙары |
| 66 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау |